***Таңсулпан ҒАРИПОВА***

# Рәғиҙә Янбулатова

**Очерк**

*Рәғиҙә Янбулатова... Әгәр иҫән булһа, әле уға 90 йәш тулыр ине. Исем-шәрифе ишетер ҡолаҡҡа моңло йыр кеүек яңғыраған ошо шәхес хаҡындағы яҙмаларҙы, иҫтәлек-хәтирәләрҙе аҡтарған һайын мин уның образына нығыраҡ ғашиҡ булдым. Уның иңенә төшкән йөктәрҙе барлаған, белгән һайын ул минең ҡаршыма нескә хисле лирик пландағы актрисанан, кеше күңеленең иң нескә ҡылдарына ҡағылып шағирәнән ҡырыҫ, ләкин, нисек кенә асы булмаһын, дөрөҫлөктө ярып алдыңа һалыр драматургка, һуңғы һулышына тиклем башҡорт театр сәнғәтенең һыулауҙарын, тимәк, тоҡомдаштарының рухи именлеген ҡайғыртыр илаһи затҡа әүерелде. РСФСР-ҙың атҡаҙанған һәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы Янбулатова хаҡында сәхнәлә уның уйнағанын күреп белмәгән быуынға ниндәй тел менән, нисек һөйләргә? Хәҡиҡәткә зарар итмәйенсә, башҡорт иле өсөн кәҙерле йән эйәһенә — сәхнә ҡотона — әүерелгән был сәнғәт алиһәһе тураһындағы яҙмаларымды ҡайҙан, ниҙән башларға? Ғәҙәттә беҙ, яҙыусы халҡы, үҙебеҙҙең ижади кухняны уҡыусыға асып һалып бармайбыҙ. Йәнәһе лә яҙмаларыбыҙ — очеркмы ул, хикәйәме — Илаһи көстөң ҡушыуы менән тыуып, аҡ ҡағыҙ биттәренә тулып: ”Инде мине уҡыһағыҙ ҙа була!” — тип яр һалып ҡысҡырып, уҡыусы алдына килеп ята. Юҡ. Ҡатмарлы, йөҙ йылға бер тыуар яҙмыштар хаҡында яҙыу еңел түгел. Бына әле лә, нисәмә көндәр уйланып, һыҙланып йөрөгәндән һуң, мин Рәғиҙә исемле, шаңлы, даулы тормош юлы үткән шәхес хаҡындағы яҙмаларымды уҡыусы хөкөмөнә тапшырырға йөрьәт иттем.*



*Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы Янбулатова*

## ”Һай йәмле лә ауылым иртәләре!”

Һай гүзәл дә тыуған Баҡайым!..
Баҡайымдың һәр биҙәген бит мин
Йөрәк түрҙәремдә һаҡлайым!

Был юлдарҙы мин Рәғиҙә Янбулатованың ”Һау булығыҙ, сыңрау торналар!” (Өфө, ”Китап” нәшриәте, 1995 йыл) шиғырҙар һәм пьесалар йыйынтығынан алдым. ”Баҡайым” тигән һүҙҙе уҡығас, 2002 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы осоронда, ”Ватандаш” журналы редакцияһы эше буйынса Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары менән бергә Кушнаренко районы Баҡай ауылына барып сығыуым иҫемә төштө. Рәғиҙә Янбулатованың ошо райондан сыҡҡан шәхес икәнлеген дә мин Баҡай ауылына ошо миссия менән килгәндә белдем. Һәр хәлдә, Рәғиҙә исемле даръяның инеш-сығанағы шул ауылдан баш ала: 1915 йыл тамамланыуға ике генә көн ҡалғанда ҙур ғына пекарня, кибет тотҡан Сәйетғәли исемле бик егәрле кеше ғаиләһендә ун икенсе бала булып донъяға килә ул. Ауыр яҙмыш Янбулатовтар ғаиләһен боронғо Торахан ерҙәрен, батыр Ҡармасан, Сәрмәсән, легендар һартайҙар төбәген ташлап, Ҡариҙел буйында, ҡара урмандар төпкөлөндә ятҡан Абдулла ауылына күсеп китергә мәжбүр итә. Артабан иҫ китмәле гүзәл тәбиғәт, ҡоштар моңо, Күгаттың ялылай тулҡынланған Ҡариҙел йылғаһы — бөтәһе лә сабый күңеленә тылсымлы, моңло йыр булып һеңә, матурлыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылған булмышына тәбиғи биҙәктәр булып үреләә. Һәр ижад кешеһенең йөрәге түрендә йәшәгән үҙ Ҡырлайы булһа, үҫмер Рәғиҙәнең Ҡырлайы булып бер түгел өс ауыл ҡала: Баҡай, Бәҙрәш һәм Абдулла...

Иркә бала була Рәғиҙә. Кинйә ҡыҙ. Төпсөк. Йәй буйы Ҡариҙелдә тулҡындар менән ярыша-уйнай һыу инә, өшөһә, бейек ағастар төбөнә бәрхәттәй түшәлгән йомшаҡ үләнгә ятып ҡояшта ҡыҙына, ҡараштарын күҙ күреме буйламаҫ күккә төбәп, һабантурғай йырын тыңлай. Ҡыҙыҡ, үҙе күренмәй, ә йыры! Юҡ, бер ҡара нөктә тоҫмөрләнә биреп ҡуйҙы. Кит инде: шул саҡлы кескәй йәндән шундай моң, аһәңле яңғырау сығыр икән! Ул арала ботаҡ һелкенгәне күҙгә салына, кемдер уға ҡарағандай... тейен икән! Күк тейен! Шаянҡайҙар яңғыҙ түгел — парлылар. Улар гел парлы-парлы була. Рәғиҙә тайпыла, тейендәр күҙ асып йомған арала икенсе ағасҡа һикерә. Ах, әле һеҙҙе! Тейендәр менән ҡыуышҡан йәш ҡыҙ баланың көлөүенән урман шыңғырай, йәш ширшылар, бала итәкле күлдәк кейгән аҡ ҡайындар әйләнеп-тулғанып китә, ҡояш, болоттар, зәңгәр күк, күк тейендәр һәм нәзәҡәтлелеге, йылғырлығы күҙгә бәрелеп торған ҡыҙ — бөтәһе бергә әйләнә...

Әммә һәр ваҡыт урман төпкөлөндә, йылға ярында ғына йәшәп булмай икән: Рәғиҙә артабан уҡыу, һөнәр алыу ниәте менән 1932 йылдың йәйендә Өфөгә юл тота.

Рәғиҙә Янбулатованың үҙе хаҡында яҙып ҡалдырған яҙмаларына, замандаш журналистарға, яҙыусыларға биргән интервьюһында уның баш ҡалаға һал менән ағып килеүе телгә алына. Һал икән — һал.

Урман төпкөлөнән баш ҡалаға килгән берҙән-бер транспорт сараһы һыу юлы икән — бында инде, заманына күрә, яҙғаны шулдыр, тип әйтергә лә булыр ине. Ләкин һалда ултырып, төнгө усаҡ яҡтыһында күҙҙәрен йә төпһөҙ ҡараңғылыҡҡа, йә алда емелдәгән уттарға төбәп килгән йәш ҡыҙҙың буласаҡ сәхнә алиһәһе икәнен уйлаһаң... Үҙенең тулҡындарында бәүелтеп үҫтергән балаһын, әйтерһең, Ер-әсә оло донъяға сығарып бирә; йәнәһе: "Мәгеҙ, алығыҙ! Мин үҫтерҙем, ҡалғанын үҙегеҙ ҡарағыҙ. Ҡарағыҙ уны: һаҡлағыҙ!" Ә ҡыҙыҡай йөҙә... Бөгөлдәре, ҡара ятыу ҡултыҡтары булған Ҡариҙел тулҡындары ул ултырған һалды ата-әсәһе, туғандары йәшәгән йылы йорттан һаман нығыраҡ алыҫлаштыра. Рәғиҙә үҙе менән йәнәш килгән төйөнсөккә күҙ һала — унда уның алмаш кейемдәре. Тағы нимәһе бар уның? Ун биш йәшлек ғүмере ағымында ул тағы нимә туплай алды? Ауылы ҡырҙарының гүзәллегенән тыш, Көрьән-Кәримде ятҡа белгән атаһының әхлаҡ, инсафлыҡ тураһында әйткәндәрен йыйҙы ул йөрәгенә, йәнә, әсәһенең егәрлелеген, бер эш алдында ла баҙап ҡалмай торған тәүәккәл холҡон...

Алда уттар көслөрәк емелдәй, яҡтыраҡ яна. Ана, таң да ата! Яңы тормош таңы! Баш ҡала таңы! Һаумы, Өфө! Һаумы, Өфө, гүзәл баш ҡала! Һине тауҙың башында балҡып, үҙенә тартып ултыралыр тип Рәғиҙә башына ла килтермәгәйне бит! Хәтерҙә ғүмерлек тәрән, юйылмаҫлыҡ эҙҙәр ҡалдырған осрашыуҙар бик күп булмай. Өфөнө тәү күреүҙән, йөрәген ҡыҫылыр хәлгә етеп шатланыуҙан тыуған хистәре, ғүмер үтә биргәс, Рәғиҙә күңеленән:

Тау башында балҡый бер ҡала,
Ул ҡала Өфө тип атала.
Яҡтыраҡ яна йондоҙҙары,
Матурҙар егет һәм ҡыҙҙары...

тигән шиғыр юлдары булып ағылыр, һәм ул "Гүзәл Өфөм — баш ҡалам" исемендәге йыр-гимнға, баш ҡалабыҙға миллиондар теленән төшмәҫ мәдхиәгә әүерелер тип кем уйлаған...

## "Ах, Өфөм, гүзәл һин, баш ҡалам"

Бәрәкәтле, уңышлы тупраҡҡа төшә Ҡариҙел буйлап һал менән килгән ҡыҙыҡай. 30-сы йылдарҙағы Өфө. Дөйөм күтәрелеш осоро. Халыҡта дәрт тә, дарман да етерлек. Яҡты киләсәккә инаныу көслө. Республиканың төрлө райондарынан, ауылдарынан килгән йәштәр уҡырға, белем алырға, тормошта үҙ урындарын табырға, йәмғиәткә файҙалы кеше булырға тырыша. Ябай ғына туҡымалар ҡаплаған беләктәрҙән физик көс урғыла, йөҙҙәрҙән йылмайыу китмәй. Бер юлы бөтә һөнәргә өйрәнге, бер тотҡанда биш урындан һындырғы килә. Рәғиҙәне лә, ана, ата-әсәһе медтехникумға уҡырға ин, тип ебәрҙеләр. Ә күңел? Ә йөрәк? Бәләкәйҙән йыр-моңға әүәҫ, сәсәнлеге теленә генә түгел, йөҙөнә сыҡ-ҡан ҡыҙ ул нисек ҡан бөрсөгөндәге аҡ һәм ҡыҙыл шарҙарҙы һанап, түҙеп ултырһын инде?! Ошоларҙы Ирғәле ағаһына әйткәс, ул ҡырҡа ҡаршы төштө: "Юҡ, юҡ! Уйлама ла! Артист булыр өсөн бик ҙур ҡый-ыулыҡ кәрәк. Һиңәме инде ул хаҡта уйларға?" Рәғиҙә ауыр көрһөнөп

иренен тешләй: ситтән ҡарағанда оялсан, баҙнатһыҙ күренгән ауыл ҡыҙының күңелендә эйәрле-йүгәнле толпар ятҡанын ҡайҙан ғына белһен инде Ирғәле ағаһы?

Бирәйем тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тиҙәр бит. Ул саҡта Өфө йәштәре Карл Маркс урамындағы ”Комсомол йорто” тип аталған бинаға йыйылыусан була. Унда шаулашып кисәләр, осрашыуҙар уҙғаралар. Ошонда уҡ рус һәм башҡорт йәштәре өсөн театр ҙа ойошторған булалар. Рәғиҙә бөтә күңеле менән был бинаға тартыла. Ҡасандыр, әле ауылда саҡта уҡ ”Сәсән” журналында һүрәттәрен күреп үлеп ғашиҡ булған Таңһылыу Рәшитова һәм Ғиниәт Ушановтарҙы ла ошонда осратҡас, улар кеүек сәхнә йондоҙо булыу теләге яңынан дөрләп яна башлай. Етмәһә, бында эшсе йәштәр театрын Абдулла Шамуҡов, Мәхмүт Хәбибуллин, Вәли Ғәлимов кеүек күренекле артистар етәкләй.

Өфөнө бер күреү менән ғашиҡ булған, йөҙөнән бәхет нуры китмәгән һомғол буйлы, сибәр ҡыҙҙы театр етәкселәре шундуҡ күреп ҡала һәм уны ”Йәш йөрәктәр” исемле спектаклдең репетицияһына саҡыра...

Бынан һуң ҡуйылған тағы ике спектаклдә роль бирәләр Рәғиҙәгә. Ҡыҙыҡайҙың түбәһе күккә тейә! Уның сәхнә тормошо менән мауығып, киләсәгенең етди боролош алыуынан ҡурҡа башлаған, атаһы урынына ҡалған Ирғәле ағаһы, Рәғиҙәнең сәнғәт техникумына инергә теләүенә ҡырҡа ҡаршы төшә һәм уны Ҡазанға, юридик техникумға уҡырға ебәрә.

Кемдәр ул генийҙар тигән һорауға мин ҡайҙалыр ”үҙҙәренең нимәгә һәләтле булыуын йәштән төшөнөп, тик шул йүнәлештә эшләгән кешеләр” тигәнде уҡығайным. Эйе, бик һирәктәр генә быны ҡара йәшенән төшөнә һәм төрлө яҡҡа ташланмай, ваҡланмай, шул маяҡҡа ҡарай ынтыла. Рәғиҙә Янбулатованы ла, минеңсә, шундайҙар рәтенә индерергә булалыр. Ана ул да, ағаһы талап иткәс, Ҡазанға бара, ләкин, һис бер икеләнеүһеҙ, Ҡазан сәнғәт техникумына имтихан тота.

Эшсе йәштәр театрында уйнап, тәжрибә туплап өлгөргән ҡыҙҙы бында ҡуш ҡул менән ҡабул итәләр, хатта беренсе курсҡа ла түгел — икенсегә! Үҙ эшенең ысын мәғәнәһендәге оҫталарынан һабаҡ алыу, кистәрен театрға йөрөп, татар сәхнәһенең алтын бағаналарын тәшкил иткән артистарҙың уйнауын ҡарау башкөллө сәнғәткә ғашиҡ булған ҡыҙҙың бөтә йөрәген, булмышын, асылын биләй. Хәҙер инде һеңлеһенең яҙмышын үҙе теләгән яҡҡа бороуҙан өмөтөн өҙгән Ирғәле ағаһы ла ризалаша, уны Ҡазандан ҡайтарып ала һәм Өфө сәнғәт училищеһында уҡыуын дауам итергә ҡуша...

Беренсе күреүҙә үк үҙен ярату булып өлгөргән Өфө был юлы ла Рәғиҙәне ҡолас йәйеп ҡаршы ала. Сәхнә оҫтаһы, арҙаҡлы шәхес Булат Имашев класында уҡый башлай һәм 1935 йылда Өфө сәнғәт техникумын тамамлап ҡуя.

Хәҙер ул йылдарҙағы Өфөнөң сәнғәт тормошона бер аҙ ҡараш ташлайыҡ. 1935 йылда, ун биш йыллыҡ юбилейы айҡанлы, Башҡорт театрына академия драма театры тигән исем бирелә. Ул заманда әле Өфөлә филармония, опера һәм балет театры ла юҡ, берҙән-бер сәнғәт усағы — шул театр. Берәү булһа ла — берәгәйле. Һәр береһенең исемен театр тарихына алтын хәрефтәр менән яҙырлыҡ актерҙар туплана унда: Хажи Бохарский, Ғималетдин Минһажев, Ғәлимйән Ҡарамышев, Булат Имашев, Әмин Зөбәйеров, Абдулла Шамуҡов, Ғиниәт Ушанов, Бәҙәр Йосо-

пова, Ғәлләм Саттаров, Зәйтүнә Бикбулатова, Тәлиғә Бикташева, Әҡлимә Садиҡова, Әзиә Рафиҡова, Дилә Дауытова, Ғәзим Туҡаев, Рим Сыртланов, Таңһылыу Рәшитова. Рәғизә Янбулатованың буласаҡ тормош юлдашы, сәхнә ҡаһарманы Арыҫлан Мөбәрәков та бар араларында. Әлегә Рәғизәнең күңелендә кемгә лә булһа һөйөү зә, көйөү зә юҡ, бары тик талпыныу ғына, сәхнә күгендә һабантурғай булып йырлау ғына!

## ”Һиндә минең йәшлеккәйем...”

Кем яратмаған, шул бер ваҡытта ла Хозайзы белмәгән, ти изге китап. Мөхәббәт. Донъяны тағы ла сағыуыраҡ, көндәрзе ҡояшлыраҡ, төндәрзе серлерәк итеү өсөн яратҡан микән был тойғоно Хозай? Ни булһа ла, Рәғизәнең оло сәхнәгә аяҡ баҫыуы менән бергә килә уға был көслө, мөҡәддәс тойғо. Бер-береһен өзөлөп һөйгән ике кешенең һөйөүе бәхетле ҡауышыуға илтеүе бер-береһенә ҡаршы осҡан меңәрләгән уҡтың бары икәүһенең генә тап килеүе — бәрелешеүе тизәр. Һәр хәлдә, былдай төкөшөү була ҡала икән һәм төкөшөүселәрзең икеһе лә ябайзарзан түгел икән, ул бөйөк шартлау — мизгел барлыҡҡа килтерә. Ут ялҡынға, һыу ташҡынға, ел дауылға әүерелә. Бөйөк ошо мизгел даһизарзан асыштар яһата, донъяға өлөшлө балалар тыуzыра. Рәғизә Янбулатова менән Арыҫлан Мөбәрәковтың (ул саҡта әле йәш артист Арыҫлан Ҡотләхмәтов) осрашыуы ла сәхнәлә шундай ялҡын, ташҡын һәм дауыл барлыҡҡа килтерә. Бәхетле һөйөү емеше булып талантлы балалары Салауат һәм Гөлли тыуа. Ваҡыт уза биргәс, Рәғизә Янбулатова ул саҡтағы кисерештәрен:

Йәшел ҡашлы йөзөккәйем,
Һиндә минең йәшлеккәйем,
Ҡулымдан һалдырып бер саҡ,
Алды һине бер аҫыл зат, —

тигән шиғыр юлдарына тезер. Эйе, ул саҡта уҡ ҡыззарзың ғына түгел, меңәрләгән тамашасының һөйөүен яулап өлгөргән, Баймаҡта колхоз-совхоз театры ойоштороп, үзе шул театрзың художество етәксеһе булып эшләгән, ә инде армия хезмәтен тамамлағас, Өфөгә театрға ҡайтып эшләй башлаған Арыҫлан Мөбәрәков. Кешенең күңел кисерештәрен, йөрәк серзәрен асып биреү һәләтенә эйә булған берзәнбер зат — ул кешенең үзе. Шуға күрә лә Рәғизә-актрисаның күңел күгән ул үзе язған түбәндәге юлдар дөрөҫөрәк сағылдыра кеүек:

Йырланым мин йырзарымдың
Иң матур, гүзәлдәрен,
Арнап өззөм, тик һиңә тип
Иң назлы, саф гөлдәрен.

## ”Ләкин бына кисен спектакль...”

Ҡалын шаршау аша ишетелә
Таныш тауыш — халыҡ геүләүе,
Әйтерһең дә, миңә ҡанат үҫә,
Әйтерһең дә, күккә үрләйем.

Һуңғы звонок, бына ”выход” етә,
Тик бер генә теләк уйында,
Ҡурҡыу ҡатыш ҡаушау,
ләкин өмөт —
Еңһәм ине, тиһең, ролемдә...

Рәғиҙә апай үҙенең шаулы-шаңлы сәхнә тормошон мин тыуырҙан 22 йыл элек башлаған. Шуға күрә уның сәхнәлә береһенән-береһе яҡтыраҡ, сағыу һәм баҙығыраҡ героинялар тыуҙырған осорон, үкенескә ҡаршы, күрә алманым. Миңә был осор сәхнә героиняларының береһенең исемен мулла тарафынан ҡолағыма аҙан итеп әйттергән. Әммә үҙенең ярты быуат (бер кеше ғүмере!) ижади эшмәкәрлеге дауамында тыуҙырған геройҙарының ҡайһы берҙәрен миңә лә күреп ҡалыу бәхете тейҙе. Эйе, Арыҫлан Мөбәрәков һәм Рәғиҙә Янбулатова атлы сәхнә титандарының күңелдән мәңге сыҡмаç сәхнә образдарын ҡараным мин.

Минең өсөн Рәғиҙә Янбулатованың студент йылдарымда ҡараған һәм иң ныҡ тетрәндергән роле Рафаэль Сафиндың ”Йәнбикә” драмаһында парторг Йәнбикә булды. Спектаклдә ваҡиғалар Йәнбикә үлгәндән һуң барғанғамы, героиня үҙе сәхнәлә күп күренмәне. Рәғиҙә Янбулатова сәхнәгә сыҡмайынса ла спектаклде Йәнбикә рухы, Йәнбикә энергияһы менән тултырҙы! Спектаклдәге оло юғалтыуҙы тамашасы бөтә йөрәге, тамырҙары, күҙәнәктәре менән тойоп ултырҙы. Күҙҙәрҙән йәш — таҙарыныу, әҙиптәр әйтмешләй, катарсис йәштәре сыҡты. Ролендә был тиклем ышандырыу көсөнә эйә итеп уйнар өсөн, моғайын, талант ҡына ла аҙҙыр, үҙеңә күпте кисерергә, һынауҙар, юғалтыуҙар, бихисап көйөнөстәр һәм һөйөнөстәр аша үтергә кәрәктер... Бәндәгә дан ҡайһы берҙә еңел бирелһә, бындай рухи бөйөклөк, камиллыҡ бик ауыр яуланыр.

Тормош — көрәш тигән төшөнсәне беҙ күптән баналь афоризм рәүешендәрәк ҡабул итергә өйрәнгәнбеҙ. Әммә Рәғиҙә кеүек таланттар үҙҙәренең Олимпына бер ҡасан да еңел күтәрелмәгән. Моцарт менән Сальери, Мөхәббәт менән Нәфрәт, Изгелек янында Яуызлыҡ һәр саҡ бергә йөрөй. Был йәнәшәлектең тәүгеләре алыҫтан күҙгә ташланып, яҡтырып, балҡып торһа, икенселәре күләгәлә ҡала, ҡараңғынан тороп, үҙенең шауҡал, нәфселе, шайтан тырнаҡлы ҡулын һуҙа. Бутай, бәрелештерә, маңлайға-маңлай төкөштөрә, абындыра, тигеҙ ерҙә һөрөндөрә. Рәғиҙә апайҙың илле йыл дауамына һуҙылған сәхнә тормошон яҡтыртҡан ваҡытлы матбуғат биттәрендә уның башҡорт сәхнәһе буйлап триумфаль атлауын да, юлына ҡоролған тоҙаҡтарҙы ла, ауҙарҙы ла яҡшы төçмөрләп була. Шуныһы ҡыҙғаныс, Рәғиҙә-актриса тормошонда ҡара шәүлә (беҙ үрҙә аталған яуызлыҡты шартлы рәүештә шулай атайыҡ) бик иртә барлыҡҡа килгән. Күрәһең, уның үтә лә талантлы булыуын бик иртә төçмөрләгәндәр һәм ”йәшел ут”ты мөмкин тиклем ҡапларға тырышҡандар.

*Тормош иптәше Арыҫлан Мөбәрәков менән*



1955 йылда Мәскәүҙә үткән Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында Башҡорт академия драма театры "Кара йөҙҙәр" (М.Ғафури), "Яңғыҙ ҡайын" (М.Кәрим), "Отелло" (В.Шекспир), "Ваня ағай" (А.Чехов) әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған спектаклдәр менән бара. Рәғиҙә Янбулатоваға "Отелло"нан — Дездемона, "Яңғыҙ ҡайын"дан Фирүзә һәм "Ваня ағай"ҙан Соня ролдәрен бирәләр. Бына шунда ҡуйыра актриса тирәһендәге өйөрмә! "Тамаша" журналына (1995 йыл) биргән интервьюһында Рәғиҙә Янбулатова ошоларҙы әйтә: "...Ләкин режиссер ҙа, уның дуҫтары ла мине алыштырған артистканы оҡшатмай. Театр етәкселәре менән дә кәңәшләшмәй, Соня роленә Бөгөлмә театрынан Вахитова тигән артистканы (телеграмма менән) уйнарға саҡырғандар. Вахитова телеграмманы тотоп, директорға инһә, тегеһе бер нәмә лә белмәй икән, ул ролде Янбулатова уйнай бит, тигән. Шулай итеп, ситтән килгән актрисаны матди яҡтан да, әхлаҡи яҡтан да бик күңелһеҙ хәлдә ҡалдыралар. Хәбәр Циалковскийға (ул ошо сараның Мәскәүҙән билдәләнгән режиссеры була. — **Авт.**) барып еткәс, ул үҙе "Ваня ағай" репетицияһына килеп, мине саҡырып алды ла бөтә картиналарҙы уйнап күрһәтергә ҡушты. Минең уйнауҙы оҡшатып, Янбулатова менән генә эшләгеҙ, тип әмер бирҙе, ваҡыт аҙ ҡалған, ниңә юҡбар менән булашаһығыҙ, тип сығып китте. Әлбиттә, һалҡын ҡараштар һиҙелеп торҙо. Мәскәү өсөн спектакль күренештәрен һүрәткә төшөрөү башланды. Соня роле өсөн миңә тегелгән костюмдарҙы кейҙереп, элек уйнаған артистканы фотоға төшөрҙөләр. Шулай итеп, программаларҙа, буклеттарҙа ролдә — башҡа артистка, ә сәхнәлә мин уйнайым". Бына бит ул, сәхнә яҙмышы! Ос та ос, үрҙәр яула! Ә-юҡ, бәхетте эсеңдә йәшереп тотоп булмаған кеүек, көнсөлдәрҙең дә телен тыйып булмай...

Артабан ошо уҡ интервьюла Рәғиҙә Янбулатова Мәскәүҙәге сығышы хаҡында ошоларҙы бәйән итә: "Бер нисә көндән һуң Бөтә Союз театр йәмғиәте (ВТО), Мәскәү театр белгестәре, профессорҙар, тәнҡитселәр ҡатнашлығында "Отелло" һәм "Ваня ағай" спектаклдәре хаҡында һөйләшеү үткәрелде. Мин булманым, күҙ алдымда уйынымды юҡҡа сығарғандарын ишеткем килмәй, тинем. Ысынлап та, тегеләр ыңғайына үҙем дә "насар уйнайымдыр" тигән фекерҙе көсләп һеңдереп бөткәйнем шул. Мөбәрәк (ул Арыҫлан Мөбәрәковты шулай тип йөрөтә. — **Авт.**), ВТО-нан ҡайтҡас, юҡҡа барманың, күккә сөйөп маҡтанылар, бигерәк тә Соняңды яраттҡандар, ти. Минең ышанғы килмәй. Икенсе көндө "Советское искусство" гәзитендәге "Классика на башкирской сцене" тигән мәҡәләне уҡығас ҡына ышандым. "...Пожалуй, самой крупной актерской удачей в этом спектакле, в основном, сыгранном ровно и сильно, является образ, созданный Янбулатовой. Этот человек большого ума, сердца, богатой и красивой души, человек порывистый и сдержанный, гордый и печальный, суровый и нежный. Какой глубочайший реализм, какой искренний порыв к счастью раскрывает актриса на сцене с Еленой Андреевой. И сколько такой душевной силы, какая подлинная страсть в ее обращении к отцу с призывом быть милосердным, стойкостью и решительной силой сопротивления всем невзгодам, верой в жизнь исполнен Сонин монолог в финале".



*Арыҫлан Мөбәрәков менән сәхнәлә*

Бына шулай. Был осраҡта, кем әйтмешләй, комментарий кәрәк түгел. Һәр хәлдә, ошо декаданан Арыҫлан Мөбәрәков — СССР-ҙың халыҡ, Рәғиҙә Янбулатова РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистары тигән оло исем күтәреп ҡайталар.

Бер мәҡәләгә йөҙ төп геройҙы уйнаған актрисаның бөтә тормош юлын, көрәшен, еңеүҙәрен һәм рәнйеүҙәрен һыйҙырып бөтөп булмайҙыр. Һәм мин уны маҡсат итеп ҡуймаbым да. Арыҫлан Мөбәрәков менән Рәғиҙә Янбулатова яҙмышы күптән инде легендаға күскән. Һәр хәлдә, уларҙың үҙҙәре тураһында тәрән кисерешкә бай, фәһемле драма яҙырға булыр ине. Минең быуын драматургтарына был темаға тотоноу, тәғәйен, иртәрәктер, ә бына беҙҙән һуңыраҡ килгәндәргә ул, моғайын, мөмкин булыр.

Эйе, ошо юлдарҙы бөгөн уҡып ултырыусыларҙың күбеһенә, бая әйткәнемсә, Рәғиҙә Янбулатованың йәшнәп сәхнә балҡытҡан саҡтарын күрергә яҙманы. Әммә уның сәхнә тормошо, ул тыуҙырған образдар, уның ниндәйерәк һәләттәргә эйә актриса булыуын ҡылыҡһырлаған матбуғат һаҡлана. Инде һарғая башлаған гәзит, журнал биттәре 50-се, 60-сы, 70-се, 80-се йылдарға алып барып сығара. Рәғиҙә апай хаҡындағы һүҙҙәр менән бергә уны әйтеүселәрҙең йөҙҙәре лә айырым-асыҡ булып ялт-йолт сағылып киткәндәй, ”хәтер ғәли йәнәптәрен” яҡтыртҡандай. Шул мәҡәләләрҙән бер нисә өҙөк килтерһәм, Рәғиҙә-актриса үҙе лә, ул эшләгән осор ҙа журнал уҡыусының күҙ алдына тулыраҡ килер һымаҡ.

”...Минең үҙем өсөн яһаған бер асышым бар. Таланттарҙың да төрлөһө булғас, ниңә әле артистың һөйкөмлөлөгө тураһында һүҙ йөрөтмәҫкә? Олораҡ быуын артистар араһынан өс кенә артисты айырып күрһәткем килә. Булат Имашев, Арыҫлан Мөбәрәков һәм Рәғиҙә Янбулатова.”

”...Әммә бары тик Рәғиҙәлә генә булған ғәжәйеп бер мөғжизәгә туҡталмай мөмкин түгел. Был мөғжизә лирика ине. Ул лирик актриса ине! Йыр-моңға һәләтле булған өсөн генә түгел. Зифа кәүҙәле, еңел һөйәкле, һөйкөмлө буй-һыны, һөйләшеүҙәре, әйткән һүҙҙәре, көлөүҙәре менән йәнде иретә алыуы менән генә лә түгел, ә бөтөн булмышы менән лирик актриса ине ул”.

Рәғиҙә Янбулатованың ижадын 1938 йылдан бирле ҡарап, күҙәтеп килгән атаҡлы драматург Нәжип Асанбай бына тағы нимәләр яҙа: ”Рәғиҙә театр штатына ҡабул ителгәс тә Мирхәйҙәр Фәйзиҙең ”Ғәлиәбаныу” драмаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә төп ролде башҡарҙы. Ә Хәлилде, әлбиттә, Арыҫлан Мөбәрәков уйнаны. Бөтә Өфөнө тетрәттеләр Рәғиҙә менән Арыҫлан Мөбәрәковтар. Бик күп Ғәлиәбаныуҙарҙы күргән, үҙҙәрендә лә бихисап актрисалар булған ҡазандар (беҙҙең театр унда гастролгә барғас) был ике йәш таланттың уйыны менән һоҡланып туя алманы. Хәлилде бигерәк ысын ауыл егете итеп оҡшатып, килештереп уйнаны инде Арыҫлан Мөбәрәков, ә Рәғиҙә Янбулатова бөтөнләй йәнебеҙҙе иретте, тинеләр.

Бына ошо йәнде иретерлек итеп уйнай белеү лириканың нәҡ үҙе түгелме һуң?

Рәғиҙә-Ғәлиәбаныу ауыл ҡыҙы. Иҫ киткес моңло тауышлы ул. Һыу буйҙарын, баҫыу-ҡырҙарҙы, ялан-ерҙәрҙе, болондарҙы, әрәмәлектәрҙә ҡоштар һайрауын, инеш-йылғалар өҫтөнән аҡсарлаҡтарҙың осоуын, бесән сапҡанда ишетелгән салғы тауыштарын күҙ алдына килтергән йырҙарында мөхәббәт тә, ҡайғы-хәсрәт тә, фажиғәнән, бәхетһеҙлектән ҡотолоу мөмкинлеге юҡлығы ла, һөйгәнен юғалтыуҙан ғазап сигеүҙәре лә яңғырай ине! Ә күҙ ҡараштарында ике йәш йөрәктең бергә тибеүе һәм тибеүҙән бергә туҡтауы сағыла... Шундай минуттарҙа әгәр һинең күҙҙәрең дә "йырлай" икән, был нимә була һуң? Был — лирика. Рәғиҙә Янбулатовала ғына була торған лирика! Эйе, Ғәлиәбаныуҙы уйнағанда Рәғиҙәнең күҙ йәштәре лә сәхнәгә йырға әйләнеп тамдылар. Һәм был йыр бөтөнләйе менән тамашасылар йөрәгенә ағылды. Рәғиҙәнең драма, трагедия аша бирелгән лирикаһы тетрәндерҙе кешеләрҙе. Ҡайғы-хәсрәттән йән ҡатһа ла, актерҙың талантлы уйынынан йән дә ирей икән! Сөнки был — сәнғәт! Матурлыҡ донъяһы!" ("Ул сәхнә күрке ине", "Ҡыҙыл таң", 1955 йыл).

"...Залда ауыр тынлыҡ. Сәхнәлә Дездемона бына йөҙөнсө ҡат һәләк була... Ләкин ҡараңғы алыҫ быуаттарҙың ҡот осҡос фажиғәһе кешеләр йөрәген, әле генә булған шикелле, тәрән ғазаплай. Дездемона донъяға һәм үҙенең мөхәббәтенә һуңғы хушлашыу һүҙҙәрен әйтә һәм уның ғүмере һүнә. Залда ут тоҡана. Алҡыштар дауылы күтәрелә. Сәхнәләге Дездемона юғала һәм үлемһеҙ образды ижад иткән актриса тамашасы ҡаршыһына баҫа...

Бына үҙенең ауыр яҙмышынан ҡасып, Таңсулпан тигән башҡорт ҡыҙы йөҙөнсө тапҡыр упҡынға ташлана. Инде сәхнәне яба торған ауыр бәрхәт шаршауҙар аҡрын ғына ҡуҙғала башлай. Ләкин залда ултырыусы кешеләр уны һиҙмәй. Сөнки улар бөтә күңелдәре менән бик борон замандағы ҡыҙҙың яҙмышын уртаҡлашалар. Был бәхетһеҙ һәм гүзәл ҡыҙҙы шәфҡәтле, көслө ҡулдар күтәреп, быуаттар ҡараңғылығы аша беҙҙең яҡты көндәргә алып киләһе ине. Ниндәй бәхетле булыр ине ул ҡыҙ! Тағы алҡыштар. Таңсулпан алыҫ йылдарҙа тороп ҡала. Сәхнәлә тамашасының хөрмәтен ҡабул итеп, баш эйергә тағы таныш актриса сыға. Был беҙҙең Рәғиҙә Янбулатова" ("Совет Башҡортостаны", 1950 йыл, Мостай Кәрим).

"Йылдар үтеү менән Р.Янбулатоваға ошондай хәҡиҡәт аңлашыла: заман менән бергә атлау, һәр роль өсөн яңы театраль алымдар эҙләү һәм табыу ғына яуланған бейеклектәрҙә ҡалырға, образдың характер тулылығына ирешергә, үҙ һәләтенде төрлө яҡлап күрһәтеп бирергә мөмкинлек аса. Н.Асанба-

*Рәғиҙәнең йөҙ роленең береһе*



евтың ”Рәйсә” драмаһы буйынса әҙерләнгән спектаклдә уға төп героиня роле тапшырыла.

Унан һуңғы йылдарҙа танылған артистка Шәфәҡ (”Ай тотолған төндө”), Тулғанай (”Әсә — Ер — Әсә”), Йәнбикә (”Йәнбикә”) кеүек ролдәрҙә сығыш яһап, үҙенең профессиональ оҫталығын яңы бейеклектәргә күтәрҙе.

Шәфәҡ образын тыуҙырыуға бәйле рәүештә сәхнә оҫтаһының ижад биографияһына өр-яңы сифаттар өҫтәлде. Шәфәҡ тәү ҡарашҡа Таңсулпан, Ҡарлуғас, Ғәлимә һәм башҡа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары образдарын хәтерләтә кеүек. Шул уҡ ваҡытта Шәфәҡ-Янбулатова уларҙан ныҡ айырыла. Юғарыла күрһәтелгән образдарҙы тыуҙырыуҙа артистка күберәк романтик буяуҙар менән эш итһә, ”Ай тотолған төндө” трагедияһындағы Шәфәҡ-Янбулатова реалистик нигеҙҙә тора. Тәрән психологизм менән ижад ителгән был драматик яҙмышлы ҡатын образы артистка талантының тағы бер баҫҡысҡа күтәрелеүен һөйләүсе күренеш булды”. (”Совет Башҡортостаны”, 1975 йыл, Т.Килмөхәмәтов).

”...Һуғыш йылдарындағы ауырлыҡтар һис онотолмаҫ, — тип һөйләй Рәғиҙә ханым. — Йәйҙең иң эҫе мәлендә лә, хәтәр ҡышҡы һалҡындарҙа ла республика ауылдары буйлап йөрөй инек. Транспорт юҡ. Һалҡын клубтарҙың береһендә ебәк күлдәк кейгән килеш Хәмзә Хәкимзада Ниязиҙың ”Бай һәм хеҙмәтсе” драмаһында Йәмилә ролен башҡарауымды йыш иҫкә төшөрәм. Шулай ҙа беҙ төшөнкөлөккә бирелмәй инек. Үҙебеҙҙең күңелде генә түгел, кешеләрҙең дә күңелен күтәрергә тырыша инек...” (”Ҡыҙыл таң”, 1975 йыл, Ғ.Рамазанов).

Актриса Рәғиҙә Янбулатованың сәхнәлә ижад итеү осоро бергә эшләгән һәм үҙенән һуң быуын-быуын килгән актерҙар өсөн тотош оҫталыҡ мәктәбе була. Уның менән бергә эшләгәндәрҙең тик береһенең генә, Әнисә Дилмөхәмәтованың иҫтәлектәренә күҙ һалғанда ла Рәғиҙә Янбулатованың актерлыҡ таланты һәм кешелек сифаттары гәлсәр кеүек өр-яңы ҡырҙары менән балҡып китә: ”Рәғиҙә Янбулатованы беренсе тапҡыр мин ”Ирәндек буйында” тигән спектаклдә Ниса ролендә күрҙем. Был осрашыу минең өсөн үҙе бер мөғжизә булды: артистканың һылыулығына, шаянлығына, моңло тауышына хайран ҡалдым. Һәм шунда: ”Насип булып, Рәғиҙә Янбулатова уйнаған бер генә ролде уйнаһам да, үҙемде бәхетле һанар инем”, — тип уйланым. Бәхетме, әллә яҙмышмы? Теләгем ҡабул булды. Миңә уның менән драма театрында бергә эшләү бәхете тейҙе, хатта спектаклдәрҙә уның ҡыҙы булырға ла тура килде. Мәҫәлән, ”Рәйсә һәм Фәйзи”ҙә ул — Рәйсә, ә мин — Фирҙәүес. Һәр спектакль һайын, сәхнәгә сығыр ваҡытым еткәнсе, Рәғиҙә-Рәйсәне күҙәтәм. Мин әсәйем Рәйсә (Рәғиҙә апай) менән бер тапҡыр, тамаша аҙағында ғына осрашам. Ләкин был осрашыу миндә онотолмаҫлыҡ тәьҫир ҡалдырҙы. Бына Фәйзи сығып китә, Рәйсә яңғыҙы. Шул саҡ мин, сәхнә артында тын да алмай көтөп торған еремдән, ”Әсәй!” — тип атылып, уның, Рәйсәнең, ҡосағына сумам да күҙҙәренә ҡарайым. Мөлдөрәмә йәш тулы күҙҙәрендә — күпме һағыш, күпме әрнеү, шул уҡ ваҡытта ҡыҙы Фирҙәүескә ҡарата булған яратыу, әсә ҡурсалауы...”

РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Рәғиҙә Янбулатова хаҡында яҙылған рецензияларҙы барлау, уның талантының асылын сағылдырған барса юлдарҙы ошо яҙмала анализлау мөмкин дә

түгел — улар үҙҙәре бер томлыҡ. Шулай ҙа, уның талантының тағы бер ҡырын тасуирларға күсер алдынан, яҙыусы һәм драматург Мөкәрәмә Садиҡованың актрисаға 80 йәш тулыу айҡанлы "Башҡортостан" гәзитендә (1995 йыл, декабрь) "Балҡышлы ғүмер" исемле мәҡәләһенә туҡталмай үтеп китеп булмайҙыр. "Театрҙа эшләгән ҡырҡ йылдан ашыу дәүерҙә Рәғиҙә Янбулатова башҡорт милли драматургияһындағы һәм классик әҫәрҙәрҙәге төрлө пландағы образдарҙы тыуҙырыуға, уларҙың һәр берәһенең үҙ йөҙөн, үҙ холҡон асып биреүгә өлгәшә.

Әйткәндәй, бик йыш ҡына бер үк төп ролде уға Зәйтүнә апай Бикбулатова менән алмашлап башҡарырға тура килде. Мин шуны әйтә алам: СССР-ҙың халыҡ артисткаһы тигән абруйлы исеме лә булған Зәйтүнә Бикбулатова апай ролдәрен иҫ китмәле шәп уйнай торғайны. Ә бына Рәғиҙә апай башҡарыуындағы шул уҡ персонаждар мөләйемерәк, хислерәк, халыҡсанлығы менән тамашасыға яҡынырак булып, күңелгә нығырак тәьҫир итер ине".

Әммә, нисек кенә үкенесле булмаһын, һәр нәмәнең осо бар, ҡырыйы бар. Бер көн килеп, үҙе урынына талантлы ҡыҙы, СССР-ҙың халыҡ артисткаһы Гөлли Мөбәрәкованы сәхнәлә ҡалдырып, Рәғиҙә Янбулатоваға яҡты йондоҙон ҡабыҙған, күңеле күген яҡтыртҡан, хыялын күккә осорған яҙмышы — сәхнәһе менән хушлашыр көн етә. Ҡасандыр йүгереп, осоноп менгән баҫҡыстарҙан бөгөн әкрен генә төшә. Һәр баҫҡыс уны сәхнәнән алыҫҡараҡ алып китә. Һәр аҙымы күңелендә шиғыр юлдары булып тыуып, күҙенән йәш булып тама:

Һиндә тыуҙы ролдәремдең
Йәнгә барып етерҙәре.
Һиндә тыуҙы уйҙарымдың
Уйылып, уйылып китерҙәре.
Һиндә тыуҙы йырҙарымдың
Наҙлылары, матурҙары.
Һиндә үтте йәшлегемдең
Нурға сумған ал таңдары...

## Пар ҡанат талмай

"Тау күкрәген ярып, атылып килеп сыҡҡан инешкә кем генә һоҡланып ҡарамай һуң? Салт аяҙ йәки болотло көндәрҙә лә, дөм ҡараңғы төндәрҙә лә аҡыҡтай аҡ тулҡындарын уйнатып аға ла аға ул... Шағирә Рәғиҙә Янбулатованың шиғриәте лә көмөш тәңкәләр сыңлатҡан инеште хәтерләтә. Һуйырташтарға серен һөйләй-һөйләй, сыңғырап аҡҡан шишмә шикелле, шағирәнең тәрән хистәргә мөлдөрәмә тулы моңдары йөрәктәрҙән урғылып аға төҫлө", — тип яҙҙы Абдулхаҡ Игебаев Рәғиҙә Янбулатованың 80 йәшлек юбилейы айҡанлы. Шиғриәт — бөйөк актриса талантының икенсе бер ҡыры. Рәғиҙә Янбулатованы, фәрештә кеүек, төшөнкөлөккә бирелеүҙән ҡурсып, һаҡлап, ул кисергән тәрән һәм киң тормош даръяһына батырмай, ғүмер ахырынаса оҙатып килгән тоғро дуҫы ла, серҙәше лә. Рәғиҙә-актриса, Рәғиҙә-катын-ҡыҙ, Рәғиҙә-шағирә күңеленең ҡылдай тартылған мәлдәрендә музаға мөрәжәғәт итә, гүйә, аҡ ҡағыҙ биттәренә хәрефтәр түгел, күңел әрнеүҙәренән яралған һағыш-гәрәбә түгелә:

Яҡын күргәнем — йән дуҫым
Китте ҡайтмаҫ ерҙәргә,
Ҡалды сәхнә, мин йәтимә,
Ах, бөгөнгө көндәрҙә.
Исмаһам һин, моңло сазым,
Бул минең менән бергә,
Быуылып ҡайғы-һағышҡа,
Үлергә ирек бирмә.

...Тик һин генә иң яҡыным,
Наҙлы шиғыр юлдарым,
Һин янымда булһаң әгәр,
Мин йәтимә булмамын.
(*"Һыҙыла күңел"*)

Рәғиҙә Янбулатованың шиғырҙары — ғүмерен сәхнәгә бағышлаған талантлы шәхес һәм ҡатын-ҡыҙҙың күңел дәфтәре лә. Уларҙа актрисаның оҙайлы сәхнә марафоны, көрәше, майҙан тотоуы, мөхәббәте, көйөнөс-һөйөнөстәре, йыуанысы, өмөтө.

Дуҫ тигәнем дошман булып әүерелгәндә,
Йылан булып күкрәгемә үрелгәндә,
Ағыуҙарын сәскән саҡта зәһәрләнеп,
Шул сағында яҙмышымды ҡәһәрләнем, —

тип яҙа ул алтмышынсы йылдарҙа.

Талантлы кешеләр ауыҙынан сыҡҡан һүҙ ҙур психик көскә эйә. Ирекһеҙҙән шуны ла уйлап ҡуяһың: йәш сағында, мөхәббәте гөрләп сәскә атҡан саҡта Рәғиҙә Янбулатова Дездемонаны, көнсөллөк, ғәйбәт ҡорбанын уйнаған... Әммә Рәғиҙә-ҡатын-ҡыҙ өмөтөн өҙмәй, бирешергә теләмәй:

Аҡтылар тик һинең өсөн
Йәштәремдең ҡайнары.
Үтте йәшлек йылдарымдың
Иң яҡты, матурҙары.
Аңлаһаң тик һин шуларҙың
Яртыһын, тик яртыһын,
Мин үкенмәм сәстәремә
Төшһә лә ҡар аҡлығы.
(*"Аңлаһаң һин..."*)

Бары ихласлыҡ, саф тойғолар ғына йөрәктән бындай һүҙҙәрҙе бәреп сығарыу һәләтенә эйәлер. Камил һәм юғары йәндәр генә бер йән һәм бер тән булып уҡмашҡан яртыһын юғалтҡас, күктәрҙе һәм ерҙе иңрәтерлек, ҡатҡан күңелдәрҙән йәш сығарырлыҡ һағышҡа һәләтлелер. Рәғиҙә-ҡатын-ҡыҙ һағышынан Игорҙе юғалтҡан Ольга, Уралын юғалтҡан Һомай иңрәүе ишетелгәндәй:

Ап-аҡ юрған ябынып,
Урман тынған бер мәл ине,
Ҡыҙыл балан тәлгәш-тәлгәш,
Һары миләш һәм гөлйемеш

Биҙәк булып ҡар өҫтөнә
Ҡыҙыл нурҙар һипкән ине.
Ат өҫтөндә ике һыбай
Шул урмандан үткән ине,
Хәтереңдәме ике һыбай —
Ул һин инең, ул мин инем.
Был һоҡланғыс матурлыҡҡа,
Был аҡлыҡҡа, был сафлыҡҡа
Ҡарап хатта күҙ ҡамашты.
Ә атҡайҙар аҡ урманда
Юлдан яҙҙы — юл аҙашты,
Беҙ аҙаштыҡ...
Мин илайым, һин көләһең,
Һары миләш, баландарҙы
Өҙөп алып тәлгәш-тәлгәш
Алдыма минең теҙәһең.
Тәме һаман тел төбөндә
Һин һайлаған күстәнәстең.
Билге ҡуймағас шул мәлде
Тапмам инде ул тәңгәлде.
Аҡ урманда беҙҙең эҙҙәр
Күптән юғалғандыр инде.
Әгәр тапһаң, шул урынды,
Бик үтенәм һинән шуны:
Өҙсө миңә шул урмандан
Балан, миләш берәр телгәш.
Әгәр тапһаң шул урынды.
(*"Әгәр тапһаң шул урынды"*)

Мин был шиғырҙы тулыһынса килтермәйенсә булдыра алманым. Шағирә күңелендәге тәрән кисерештәр шиғырҙың фабулаһына ятҡан, мини-драма булып, уның композицияһын туҡыған. Драматизм көслө һәм көсөргәнешле булһа ла, лирик геройҙың характер һыҙаттары — инсафлыҡ һәм баҫалҡылыҡ — әҫәрҙең эстетик йөҙөн һәм гуманлы йүнәлешен билдәләгән, ә тик ҡыраузҙа бешә, өлгөрә торған миләш, балан — әсе яҙмыш, әсе дөрөҫлөк, әсе фажиғә, күҙҙән йәш ағыҙыр мөхәббәт. Әммә юғалтыуҙың йәнә бер төрө бар — уныһы үлем. Ғәзиз кешең өҫтөнә өйөлгән ҡара тупраҡ. Рәғиҙә Янбулатованың был юғалтыуы — ҡайғыһы — шулай уҡ шиғыр юлдары булып аҡ ҡағыҙға ауған:

Имеш, тимен йәш сағыбыҙ,
Йөрәктә һөйөү бары,
Дошмандарҙың арабыҙға
Әле инмәгән сағы...
"Шатморат", "Ҡарлуғас" булып
Уйнайбыҙ сәхнәләрҙә,
Сәхнә бер саҡ әүерелә
Ал гөллө сәхрәләргә.

Төштәремә инәһең йыш,
Эйәһең башҡайыңды,
Күҙҙәремә ҡарайһың да
Әйтәһең: ташланыңмы?
Мин түгел, һин ташлап киттең,
Мәңге ҡайтмаҫ ерҙәргә,
Күңелемде әрнеттең һәм
Һалдың ғазап-сирҙәргә...
(*"Төштәремә инәһең"*)

Ә бына шул уҡ кәйеф менән яҙылған икенсе бер шиғырында Рәғиҙә Янбулатова ғәҙәттәге 8—7 шиғри үлсәмдән ҡасып, 10—9 үлсәмле, халыҡ йырҙарына тартым строфалы шиғриәткә мөрәжәғәт итә:

Бергә йөрөгән һуҡмаҡтарҙан үтәм,
Таныш аҡландарҙа ял итәм,
Иңбашымдан һөйөп иҫкән елде
Һинең ҡулың итеп хис итәм.
Күҙҙәремде төбәп алыҫтарға,
Өмөт менән һине мин көтәм,
Иртә ятҡан томан араһынан
Килеп сығырһың тип хис итәм.
Урмандарҙа кәкүк, ай, саҡыра,
Тауышҡайы бигерәк моңло икән,
Кәкүк түгел, мине шулай зарығып,
Һин саҡыраһың тип хис итәм.

Был шиғырҙың үлсәме, интонацияһы ғына түгел, бәлки дөйөмлөктән — тәбиғәт күренешен тасуирлауҙан талпынып, шәхсәнлеккә күсеү элементы ла Рәғиҙә Янбулатованың шиғриәтен халыҡ ижадының иң матур өлгөләренә яҡынлаштыра. Уларҙа аһәңлекте көсәйтә, лирик геройҙың, был осраҡта шағирәнең, моңсан, уйсан булмышын дөйөмләштереп, Һыуһылыу, Һомай образдарына тиңләштерә.

Эйе, Рәғиҙә Янбулатованың ун биш кенә йәшендә һал менән ағып Өфөгә килеүе тикмәгә булмаған. Хәйерле сәғәттә, фәрештәләрҙең Хоҙайға дан әйтеп торған сағына тура килгәндер. Актриса сифатында ярты быуатҡа яҡын майҙан тотҡан Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы шиғриәт күгендә лә үҙ урынын яуланы: "Елбәҙәк ҡарҙар" (1959), "Таныш көйҙәр" (1962), "Йөрәк йырҙары" (1966), "Аҡ сәскә атҡас балан" (1976), "Һау булығыҙ, сыңрау торналар" (1995) исемле шиғри йыйынтыҡтары, "Юлдар-юлдар" тигән иҫтәлектәр китабы, "Һынау", "Көл әйҙә, кескенәм!" тип аталған балалар өсөн йыйынтыҡтары — пар ҡанатлы Янбулатованың икенсе яртыһы. Йырсы шағирә, йырсы актриса булараҡ, уның шиғриәте үҙенән-үҙе көйләп, моңланып торғандай. Шуғалыр ҙа инде уның ижадына бик күп композиторҙар мөрәжәғәт итә. "Иҫтәлек", "Йәшлегем" (Таһир Кәримов), "Аҡ сәскә атҡас балан", "Һуңлама, кил инде!" (Бәхти Ғайсин), "Әйт, дуҫҡайым, әйт" (Сара Садиҡова), "Аҡсарлағым" (Абдулла Хәлфетдинов) кеүек йырҙары заманының иң популяр йырҙарына әйләнә, улай ғына түгел, йылдар үткәс, халыҡ күңелен яулап, үҙҙәре лә халыҡ йырҙарына әүерелә...

## ”Һағынырмын тыуған Уралымды...”

Яңы бүлеккә исем биргән был юлдарҙы мин Рәғиҙә Янбулатованың ”Таштуғай” исемле пьесаһынан алдым. Эйе, Рәғиҙә Янбулатова драматургия өлкәһендә лә актив эшләне. Ул башҡорт халҡы тарихындағы киҫкен ваҡиғаларҙы сағылдырған ”Байрамбикә” трагедияһын (мин ул әҫәр буйынса эшләнгән спектаклде Сибай театры ҡуйыуында ҡарағайным), ”Таштуғай” исемле халыҡ йыры нигеҙендә яҙылған ”Таштуғай” драмаһын, ”Мөхәббәт ялҡынында” (”Ғашиҡтар төнө”) тигән музыкаль комедия, Һәҙиә Дәүләтшинаның ”Ырғыҙ” романы буйынса ”Дауыл” тигән опера либреттоһы яҙҙы. Бынан тыш, П.Кальдерон, С.Айтматов, А.Каххар, Р.Тагор драмаларын, шулай уҡ байтаҡ рус шағирҙары әҫәрҙәрен тәржемә итте.

Унының драмаларын уҡырға тотонор алдынан: ”Ғүмере сәхнәлә үткән кешенең пьеса яҙып ҡарарға теләге тыумай ҡалмайҙыр, тупланған тәжрибә, жанр мөмкинлектәренән сығып, ниндәйҙер дөйөмләштереүҙәр яһарға этәргес булалыр”, — тип уйланым. Әммә, әҫәрҙәрҙең эстәлегенә үтеп ингән һайын, Рәғиҙә Янбулатовала тәбиғи драматург һәләтен, һүҙ менән эш итеү оҫталығын ныҡыраҡ тойҙом. Ахыр сиктә Рәғиҙә Янбулатова актриса булмаған хәлдә лә драматургия өлкәһендә эшләр ине, тигән һығымтаға килдем. Драманың нигеҙе — драматургтың драматик конфликт һәм образдар ҡора белеүендә. Ошоларһыҙ сәхнә әҫәре юҡ.

Бына инглиз кешеһе Дэвид менән Аллаяр мулланың Байрамбикәне тоҙаҡҡа төшөрөү өсөн ҡорған этлеге — интригаһы:

**Дэвид.**

...Бер күреүҙә хайран булып ҡалдым,
Матурлығы алды һушымды.
Гүзәлдәрҙе мин күп күргәнем бар,
Ләкин Байрамбикә кеүеген
Тәү ҡат күрәм һәм әйтәм дөрөҫөн:
Теләгемә ирешмәй бер саҡта ла
Ҡалғаным юҡ минең. Һин — мулла,
Ил башлығы. Һинең һүҙең закон,
Ул ҡыҙ менән мине ҡушһаң әгәр,
Биргән алтынымдан ике өлөш
Артығыраҡ бирәм үҙеңә.

**Аллаяр.**

Улай булмай, илсе, башҡорт халҡы
Ярата ҡунаҡтың изгеһен.
Башҡа хәйлә уйлап табыр кәрәк,
Улар ышанысын яулау өсөн...
*(Уйланып)*
Һин күскән бул беҙҙең динебеҙгә,
Йәғни мосолман бул. Ҡөрьән тотоп
Ҡабатларһың минең артымдан.
Ҡөрьәндәге берәй аятты...

Уралдағы байлыҡҡа, аҫылташтарға төбәлгән ситтәр ҡарашы. Алдау, хәйлә менән килә улар башҡорт еренә. Ер-һыуҙы яттарҙан һаҡлап, Татлыбайҙар, Байғөбәктәр башын һала, улар урынына ҡылыс күтәреп Байрамбикә, Көнһылыуҙар сыға.

Бына "Таштуғай"ҙан Көнһылыу монологы:

Уралҡайым, һиндә Байғөбәгем,
Күп ауланы, айыу-бүреңде.
Яңғыҙайтмам, Урал, үгәйһетмәм
Бәғерем ятҡан ҡара гүреңде.
Уралҡайым, һинең биттәреңдә
Ат уйнатыр миңә юл булмаҫ.
Урал итәгендә бер тау артты,
Һине йотҡан үкһеҙ убанан,
Үс алырға килдем Ҡансуранан...

Ирмен тигән ирҙең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тиҙәр. Күрәбеҙ, бындай толпар Рәғиҙә-актриса йөрәгендә лә йәшәгән. Шул көс биргән уға. Шул көс уға ошондай героик яҙмышлы ҡатындар хаҡында әҫәрҙәр яҙҙыртҡан. Ҡулында ҡорал уйнатыр ҡатындар барында илдә бәрәкәт тә булған. Ә бына Флорид Бүләковтың ошо уҡ "Таштуғай" легенда-һынан талпынып яҙған Көнһылыуы Рәғиҙә Янбулатова Көнһылыуы-ның антиподы. Ул телһеҙ. Үҙен дә, һөйгәнен дә яҡлай алмай. Милләт ырыҫына шайтан балта сапҡан — халыҡ эскегә һалышҡан. Эскесе атанан донъяға яралған Көнһылыу, тышҡы ҡиәфәте менән һылыу баш-ҡорт ҡыҙҙарына оҡшаһа ла, асылда зәғиф. Бер уйлаһаң, Рәғиҙә Көнһылыуынан Флорид Көнһылыуына тиклем күпме генә ғүмер үткән...

Илен таланыуҙан яҡлап, яу сабырға әҙер Байрамбикә лә:

**Байрамбикә.** Ә һеҙ кемдәр,
Нимә соҡойһоғоҙ,
Нимә һалаһығыҙ тоҡтарға?

**Маврин.** Беҙ Мәскәүҙән, Аҡ батшаның
Әмере менән килгән кешеләр.
Ә был — сит ил кешеһе, йыраҡ
илдән
Килгән беҙгә, йәғни Рәсәйгә.
Ә беҙ уны алып килдек
һеҙҙең яҡтарға...

**Байрамбикә.** Ә ул әҙәм
Ҡайҙан белә минең исемде?

**Мөләк.** Мин әйттем.

**Байрамбикә.** Телең ҡороғор.
Ә һин әйттеңме һуң уларға
Йәйләү халҡы
Рөхсәт итмәгән яттарға

Урман, тауҙарына хужалай
Йөрөп ятырға, таштар
ватырға?
*(Ирҙәр шарҡылдап көлөшәләр)*

**Мөләк.** Уныһы, һылыу, түрәләр эше,
Аллаяр мулла үҙе рөхсәт иткән,
Һинең менән минән
һорамаған, хи-хи...

Драманың икенсе битенән (тәүге күренешенән үк) башланған был һөйләшеү әҫәрҙең конфликтында синфи көрәш ятыуына ишаралай. Шуға күрә лә Байрамбикә образына һалынған мәғәнә, Бажов әкиәттәрендәге ”Баҡыр тау хужабикәһе”некенә ҡарағанда ла ҙурыраҡ һәм тәрәнерәк. Һәм мин әйтер инем, ”Байрамбикә”нең яҙылыу ваҡыты социалистик реализм осорона тура килһә лә, Байрамбикәнең ил ҡыҙы булыуы, халыҡ мәнфәғәте, халыҡ байлығы өсөн өҙгөләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алмай булмай. Ошо яғы менән пьеса бөгөнгө көндә лә актуаль. Айырма шунда ғына: Дэвид, Мавриндар башҡорт еренә тоҡтар тотоп килһә, бөгөнгө көн мавриндарының аппетиты сағыштырғыһыҙ юғары...

Шуға күрә лә Рәғиҙә Янбулатованың Ватан, ил, тыуған төйәк, халыҡ яҙмышы хаҡындағы уйланыуҙары, артистка, шағирә, драматург йөрәгенә һыйып бөтә алмайынса, публицистика жанрына тоташҡандыр.

## ”Эй, яна ла йөрәгем...”

Рәғиҙә Янбулатова публицистикаға алтмышынсы йылдарҙа уҡ килә. ”Ҡайһы бер теләктәр” (”Совет Башҡортостаны”, 1965 йыл) мәҡәләһендә ул ваҡыт өсөн типик күренешкә, дөрөҫөрәге, типик етешһеҙлеккә әүерелгән мәсьәләне күтәреп сыға. ”Театр сәнғәтенә талаптар ҙур булған һымаҡ уҡ, халыҡты эстетик тәрбиәләү сараларын үткәреүҙә урындағы етәкселәргә ҡарата беҙҙең дә ҡайһы бер талаптарыбыҙ бар, — тип яҙа ул. — Беренсенән, күп урындарҙа клубтарҙың булмауы йәки булғанының да һәйбәтләп йыһазландырылмауы — ҙур кәмселек ул”. Был мәҡәләнән күренеүенсә, Рәғиҙә Янбулатованы иң нык борсоғаны — халыҡҡа эстетик тәрбиә биреү сығанағы булған театрҙың мөмкинлектәрен тулыһынса файҙалана алмау: ”Драма спектаклдәрен дүрт яҡтан да ел-дауыл олоп торған яландарҙа ҡуйыу, бышылдап, ярты тауыш менән генә һөйләшә торған сәхнәләрҙе, иң нескә йөрәк хистәрен аңлатҡан диалогтарҙы меңләгән халыҡҡа ишетелһен өсөн, ирекһеҙҙән образдан сығып, тамаҡ ярылғансы ҡысҡырып һөйләү менән, спектаклдең сифатын төшөрөү генә түгел, беҙ бит, киреһенсә, халыҡтың эстетик тойғоһон кәмһетеү кеүек енәйәт эшләйбеҙ түгелме?”

Рәғиҙә Янбулатованы дөйөм кешелеккә хас гуманлыҡ, матурлыҡты аңлай һәм һаҡлай белеү тойғоһон үҫеп килгән йәш быуында тәрбиәләү мәсьәләләре лә борсой. Үҙенең ”Күңел сафлығы” (”Башҡортостан пионеры”, 1986 йыл) мәҡәләһендә, балаларға нотоҡ уҡыу формаһында ул ошоларҙы яҙа: ”Кеше күңелендәге кисерештәрҙе һиҙгер тойоу һәм

уны үҙ йөрәге аша үткәреп, сәхнәлә күрһәтеү һәләтенә һәр кем эйә була алмай. Күп һанлы геройҙарҙың рухи донъяһын, характерын сағылдырыу өсөн уларҙың һәр береһендә тетрәнеүҙәрҙе, хаталарҙы, күҙ йәштәрен кисерергә кәрәк...

Ә тойғолар байлығын үҙендә бәләкәйҙән тәрбиәләргә мөмкин. Тәбиғәткә, гүзәллеккә һоҡлана белгән, күңелендә яҡты хыялдар, фантазия йөрөткән балалар, үҫкәс тә, тәрән натуралы булып ҡала. Киләсәктә үҙен театрға бағышларға теләгәндәр иң тәүҙә сәнғәттең бөтә төрҙәрен дә аңларға, баһаларға өйрәнергә тейештәр".

Рәғиҙә Янбулатованың ун биш йәштән сәхнәгә бағышланған ғүмере эсендә сәнғәт хаҡында борсолоуҙары, уйланыуҙарынан тыуылған фекерҙәре бихисап. Улар унын әңгәмәләренә һибелгән, унын хаҡында яҙылған иҫәпһеҙ күп мәҡәләләргә сәселгән. Ошондай уйланыуҙарға ҡоролған бер әңгәмәһе "Эй, яна ла йөрәгем..." ("Башҡортостан", 1993 йыл) тип атала. Фани донъя менән хушлашырға ике йыл ҡалғанда биргән әңгәмәһендә (уны журналист Нурия Амангилдина алып барған) Рәғиҙә Янбулатованың милли сәнғәт өсөн янған йөрәгенең тибеше бигерәк тә үҙен асыҡ тойҙора. Бөйөк сәхнә оҫтаһы Рәғиҙә Янбулатованың яҡты образын сағылдырыу ниәтендә яҙылған был яҙмаларында ошо әңгәмәнән бер нисә өҙөк килтереү ҡулай булыр кеүек. Шуны әйтергә кәрәк: әңгәмәлә һүҙ Башҡортостандың төп театры — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры тураһында бара.

"...Театрҙың мөһабәтлеген, олпатлығын юғалтыуы, ваҡланыуы хәүефкә һала. Республикабыҙҙа Академия тигән оло исемде йөрөткән театр булараҡ, ул башҡа театр коллективтарына өлгө күрһәтергә, улар өсөн тәжрибә туплау, өйрәнеү мәктәбенә әйләнергә тейеш. Быйыл яҙ Салауат ҡалаһында уҙған республика театрҙары фестивалендә беҙҙең театрҙың иң түбән баһа алыуы ла әле әйтелгәндәргә дәлил түгелме ни?" "...1955 йыл Мәскәүҙә уҙғарылған Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте декадаһында СССР-ҙың халыҡ артисы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Борис Бабочкин спектаклдәребеҙҙе ҡалдырмай ҡарап барҙы һәм беҙҙең менән осрашыуҙа театрға ҡарата шундай фекер әйтте: "Ваши актеры замечательные, такими актерами театр может гордиться. Ими надо дорожить, их надо беречь и ценить. Артисты — они достояние и гордость государства, народа!" Ә беҙҙә ул мәсьәлә нисек тора? Артистарҙың яҙмыштары нисек хәл ителә, ҡәҙерҙәрен беләләрме, баһалайҙармы? Дөрөҫөн әйтәм: артистарҙың ҡәҙере юҡ! Китәләр икән, китә бирһендәр, уларҙан башҡа ла театр йәшәйәсәк, тигән фекерҙәләр". Артабан Рәғиҙә Сәйетғәли ҡыҙы театрҙа үҙҙәре өлкән быуын ҡорона инеп, барыһы ла маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булғас ҡына туған театрҙарын ҡалдырып, төрлөһө төрлө яҡҡа таралған РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистары И.Йомағолов, Ә.Әбүшахманов, О.Ханов, Х.Яруллин, Башҡортостандың халыҡ артисы Ә.Хөсәйеновтарҙың (хәҙер инде мәрхүм. — **Авт.**) театрҙан китеүенең үҙенә аяҙ көндә йәшен атҡандай тәьҫир итеүен әйтә, был хәлгә Мәҙәниәт министрлығының, башҡа етәкселәрҙең вайымһыҙ булыуына ғәжәпләнә; шул уҡ ваҡытта театрға килгән яңы көстәрҙең ҡояш кеүек балҡып килеп сығыуҙарына һөйөнә; Академия тигән һүҙҙе афишаларҙа ғына түгел, ә

сәхнәнән аҡлауҙарын, театрҙың исеме есеменә тап килеүен иҫбат итеүҙәрен теләй.

Бына шулай: Рәғиҙә Янбулатованың ҡайһы мәҡәләһенә, әйткәндәренә юлыҡма — уларҙың барыһы ла бөгөнгө көн талабынан сығып яҙылғандай, әйтелгәндәй. Мәңгелек ҡиммәттәрҙе күңеле менән тойған һәм һүҙенән эше айырылмаған шәхестәрҙең генә хәленән килер эмәлдер инде был.

Һүҙенән эше айырылмаған тигәндәй, тағы бер нәмәгә иғтибар иттем. Рәғиҙә Янбулатованың архив материалдарын аҡтарып ултырғанда, бер бәләкәй генә мәҡәлә күҙгә салынды: "Үҙенең ун ике йыл йәшәү дәүерендә Совет тыныслыҡ фонды ысын мәғәнәһендә халыҡ фондына әүерелде. ...Эшселәрҙән, колхозсыларҙан, хеҙмәт коллективтарынан, шулай уҡ шәхсән рәүештә интеллигенциянан тыныслыҡ фондына күпләп аҡса күсерелә. Айырыуса йылылыҡ менән мин улар араһында РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, БАССР-ҙың халыҡ артисткаһы Рәғиҙә Сәйетғәле ҡыҙы Янбулатованың исемен атар инем: яңыраҡ, үҙенең отпускыһы ваҡытында Кушнаренко һәм Саҡмағош райондарында концерт менән сығыш яһап, гонорарын ул тыныслыҡ фондына күсерҙе".

...Сәхнәлә тыуҙырған йөҙҙән ашыу роль. Уларҙың һәр береһе актерҙан күпме физик һәм рухи көс, фантазия, белем, тормош тәжрибәһе, интеллект, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа ашыуҙы һәм, киреһенсә, баҡыйлыҡтан фанилыҡҡа төшөүҙе талап итә. Шул уҡ ваҡытта төрлө темпераментлы, төрлө эстетикаға эйә режиссерҙар, партнерҙар менән эшләү... Өҫтәүенә, һин әсә лә, ир ҡатыны ла. Һуғыш йылдарында яғылмаған клубтарҙа уйнау (улар хатта бөгөн дә комфортлылыҡ менән айырылмай), йөк машинаһынан ҡолап, ҡабырға һындырған килеш кис сәхнәлә уйнау (Рәғиҙә Янбулатованың иҫтәлектәрендә ундай осраҡ та бар) — бөтәһенә нисек түҙҙе, нисек өлгөрҙө икән Рәғиҙә Янбулатова, тигән һорау тыуа. Һорауыма беренсе яуап унын сәхнәне үлеп яратыуы булһа, икенсеһе — тамашасы мөхәббәтелер, моғайын. Утын ташлап тормаһаң, усаҡтың ниндәйе лә, хатта иң көслөһө лә һүнә. Рәғиҙә усағының ярты быуат буйы дөрләп яныуының сәбәбе, ахыры, шундалыр. ...Тамашасы һөйөүендәлер.

Һуҡмаҡтар юлға олғаша, йылғалар инештән башланып, даръяға әйләнә. Яҙын тумалаған бөрөләр — йәй сәскәгә, көҙ емешкә әүерелә. Һәр есемдең өлгөрөү, бешеү һәм өҙөлөп төшөү миҙгеле барған кеүек, кешегә лә бер мәл яҡты донъя менән хушлашыр көн етә. Тос, бик тос орлоҡтар сәсеп китте Рәғиҙә Янбулатова үҙе ҡасандыр орлоҡ булып төшкән Өфө ерлегенә. Әйткәндәй, поэма тигән һүҙ грек телендә "ижад итеү" тигәнде аңлата. Рәғиҙә Янбулатова үҙенең хеҙмәте, йәшәү рәүеше менән "Ҡатын-ҡыҙ", "Әсә", "Актриса", "Шағирә", "Драматург", "Публицист" тигән бүлектәрҙән торған тәрән йөкмәткеле һәм юғары художестволы, гуманлыҡ идеялары, яҡты һәм намыҫлы йәшәү принциптары менән һуғарылған иҫ китмәле уҡымлы поэма ижад итте. Поэма һәр бер хәрефе саф алтындан яҙылып, "Рәғиҙә Янбулатова" тип атала.